БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ҠАЛА ОКРУГЫ ХАКИМИӘТЕ
МӘҒАРИФ ИДАРАЛЫҒЫ
«ФӘННИ-МӘҒЛҮМӘТИ-МЕТОДИК ҮҘӘК»
ӨҪТӘМӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ МУНИЦИПАЛЬ БЮДЖЕТ
МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ

# БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА…

**«Һаумы, һаумы, әкиәт!»**
донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт
телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы

ӨФӨ – 2023

**БОРОН-БОРОН ЗАМАНДА…:** «Һаумы, һаумы, әкиәт!» донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсы. – Өфө: Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы, 2023. – 50 б.

**Редакцион коллегия:**
Батыршин А.Р., Мәғариф идаралығы начальнигы;
Баҙыҡов С.Р., Мәғариф идаралығы начальнигы урынбаҫары;
Аҡбулатова Л.Т., «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы директоры.

**Яуаплы редактор:**
Аҫылғужина З.А., «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

**Сығарылыш өсөн яуаплылар:**
Торопҡолов В.Р., Мәғариф идаралығының баш белгесе;
Разамасова А.С., Мәғариф идаралығының баш белгесе;
Абдрахманова Л.Н., «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методик бүлек мөдире;
Ғөбәйҙуллина Л.Ф., «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы;
Мостаева Р.М., «Фәнни-мәғлүмәти-методик үҙәк» өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет мәғариф учреждениеһы методисы.

**Корректоры:** Алсынбаева Р.Ғ.

«Борон-борон заманда...» исемле йыйынтыҡ үҙ эсенә «Һаумы, һаумы, әкиәт!» донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүселәрҙең ҡала конкурсының «Йәш әкиәтселәр» номинацияһында ҡатнашҡан балаларҙың ижад эштәрен туплаған.

Был йыйынтыҡ кескәй балаларға, ата-әсәләргә, тәрбиәсе-уҡытыусыларға тәҡдим ителә.



**Вәлиева Ильнара**

*Өфө калаһы кала округының «48-се башҡорт лицейы» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы*

*Етәксеһе: Вәлиева Идалия Роберт ҡыҙы, башланғыс кластар уҡытыусыһы*

## Бал ҡорттары

Борон-борон заманда, бер Ил булған, ти. Ошо Илде икегә бүлеп, тауҙар теҙелеп киткән икән. Был тауҙарҙың бер яғында урман, ә икенсе битләүендә күҙҙең яуын алырлыҡ матур-матур сәскәләр үҫкән һәм сылтырап һыуыҡ һыулы шишмә аҡҡан. Сәскәләрҙә бал ҡорттары йәшәгән, ти. Әгәр бал ҡорттары икәүләп бер сәскәгә ултырһа, сәскә быларҙы күтәрә алмай, башын эйә лә ҡуя. Бал ҡорттары ергә ҡолап төшә. Шуның өсөн, бер сәскәлә бер генә бал ҡорто йәшәй алған. Был Бал ҡорттары шул йәшәгән сәскәнең балы менән туҡланғандар.

Тик көн һайын урмандан тайыш табан Айыу шишмәгә һыу эсергә йөрөй икән. Урмандан сыға ла шишмәгә тиклем Бал ҡорттарын еләк һымаҡ берәмләп сүпләп ашай икән. Был яуыздан һәр бер бал ҡорто ҡалтыранып ҡурҡа, сөнки бал ҡорто бәләкәй генә, ә тайыш табан ҙур. Бал ҡортоноң айыуға бер нисек тә көсө етмәй. Тағы ҡояш сыға, теге тайыш табан урмандан сығып килгәнен бер бал ҡорто күреп ҡалған. Ул башҡа бал ҡорттарына бе-

зелдәп: «Айыу килә», – тип әйтеп сыҡҡан. Барыһы ла һауаға күтәрелгәндәр. Айыу берәүһен тотоп ашайым тиһә, башҡалары быны безелдәп осоп ураталар икән. Тайыш табан бал ҡортон ашайым тигәндә, был бал ҡорто башҡа ҡорттарҙы күреп, батырайып китеп, айыуҙың телен сағып алған. Айыу илай-илай урманға ҡасҡан. Бал ҡорттары артынан оса, шулай урманға тиклем осоп барып еткәндәр. Бал ҡорттары нвыыҡ арыған. Шуға хәлдәре бөтөп ағасҡа ҡунғандар. Шунан бирле, Бал ҡорттары бергәләп ағаста йәшәргә булғандар. Сөнки бергә күңелле һәм ҡурҡыныс түгел. Ә сәскәгә бал йыйырға йөрөгәндәр. Айыу бал ҡорттарын башҡа ашамаған, ә балдың тәмлелеген ишетеп ҡалған. Был түҙмәй, былар йәшәгән ағасҡа яҡынлап, Бал ҡорттары сәскәгә осоп киткәнен ҡарап торған да, балын урлап ашаған. Бал ҡорттары ҡайтһа, йыйған бал юҡ икән. Былар бик ныҡ ҡайғырғандар ҙа, иртән тороп тағы бал йыйырға осоп киткәндәр. Берҙән-бер көндө Айыу тағы ағасҡа бал ашарға



менеп килә икән. Бал ҡорттары безелдәп оса башлаған-дар. Ошо ваҡытта был ерҙә бер кеше үтеп барған. Ул айыуҙы ҡурҡытып ебәргән. Кеше бал ҡорттарына: «Әйҙәгеҙ минең менән. Мин һеҙгә йәшәргә өй эшләрмен, Айыуҙан да һаҡлармын», – тигән. Бал ҡорттары риза булған. Шул көндән бирле улар умартала йәшәй икән. Кеше ҡотҡарғаны өсөн, рәхмәт әйтеп, бал менән бүлешәләр, ти.



## *Батырова Мәҙинә*

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «Рауил Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһы» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәкселәре: Бикмөхәмәтова Гөлгөнә Сабит ҡыҙы, башланғыс кластар уҡытыусыһы; Батырова Рита Дамир ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

## *Телһөйәр, Илһөйәр, Ерһөйәр тураһында*

Беләһегеҙме, Телһөйәр, Илһөйәр, Ерһөйәр һүҙҙәре ҡайҙан килеп сыҡҡан? Әкиәтем шул турала. Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың Тел, Ил, Ер исемле өс ҡыҙы булған. Исемдәре ҡыҫҡа ғына булһа ла ҡыҙҙар шундай аҡыллы, сос булған-дар. Әбей менән бабай ҡыҙҙарына гел былай тип әйтер булғандар: «Ҡыҙҙарыбыҙ, был донъяла бәхетле булыр өсөн һеҙгә татыу, берҙәм булырға кәрәк». Ҡайҙа йөрөһәләр

ҙә өс ҡыҙ гел бергә булған. Шулай бәхетле йәшәп ятҡанда көслө ел сыҡҡан да өс ҡыҙҙы өс яҡҡа осортоп алып киткән. Ҡыҙҙары юғалғас, әбей менән бабай бик ҡайғырған, ти. Улар етемһерәп кенә көн иткәндәр. Ә өс ҡыҙ өсөһө был мәлдә өс яҡта икән. Тел үҙенә таныш булмаған ергә килеп төшкәс, аптырап ҡалған. Кешеләр әллә ниндәй ят телдә һөйләшәләр, ти. Бер нимә лә аңламаған бахыр ҡыҙ асыҡҡан, бер үҙе етемһерәп кенә йөрөгән башта. Шунан яйлап ҡына унда йәшәгән халыҡтың телен өйрәнергә тырышҡан. Ҡыҙ үҙе батша һарайында йөрөп ятҡанын аҙаҡтан ғына аңлап ҡалған. Баҡтиһәң, батшаның тылсымлы бер йәшниге бар икән. Шул йәшниктә бер төймәгә баҫһа, ел сыға ла батшаға кәрәкле кешеләрҙе осорта ла алып китә, ти. Тел был турала ишетеп ҡалған да бик ҡурҡҡан. Шулай ҙа бөтә ҡыйыулығын йыйып батшаға барған да тыуған иленә ҡайтарыуын үтенгән.

– Һиңә беҙҙә нимә оҡшамай? – тип һораған батша.

– Бөтәһе лә оҡшай, батшам, тик минең үҙ туған телемдә һөйләшеп йәшәгем килә, – тигән Тел. Батша ыңғай ғына яуап бирмәгән. Өс көн, өс төн уйлаған ул. Шунан ғына:

– Телһөйәр икәнһең, тимәк, һин тыуған илеңдә нығыраҡ кәрәк булырһың. Ҡайтырға рөхсәт, – тигән.

– Батша, һеҙгә бер үтенесем бар ине, тыңлаһаңсы, – тигән, ти, Тел һәм үҙенең тағы ике бер туғаны барлығы тураһында әйткән дә:

– Уларҙың ҡайҙа икәнен белмәйем, табышырға ярҙам итсе, – тигән. Батша ҡыҙҙың үтенесен тыңлаған һәм Ил менән Ерҙе эҙләргә ҡушҡан. Тылсымлы йәшниктең ҡалған ике ҡыҙҙы ни өсөн күрмәүенә үҙе аптырай, ти. Күпмелер ваҡыт үткәс, ике ҡыҙҙы батша һарайына алып



килгәндәр. Йөҙҙәре Телдекенә оҡшаған икән.

– Ошомо туғандарың? – тип һораған батша. Өс бер туған ҡыҙ бер-береһен күреүгә бик шатланған, ти. Батшаның шул тиклем һылыу, аҡыллы ҡыҙҙарҙы ҡайтарғыһы килмәгән, сөнки уның илендә лә ерен, илен, телен яратҡан кешеләр йәшәүен теләгән. Шулай ҙа батша:

– Һеҙҙең берҙәм булыуығыҙға аптырайым. Кем һеҙҙе быға өйрәтте?

– Ата-әсәйебеҙ, – тигәндәр ҡыҙҙар бер тауыштан.

– Тимәк, берҙәмлек ғаиләнән башлана икән...

– Эйе, батша, теле барҙың – иле бар, иле барҙың ере лә була.

– Илһөйәр, ерһөйәр, телһөйәр булырға кәрәк, тимәк, – тигән дә батша тылсымлы йәшнигенең төймәһенә баҫыуы була көслө ел сығып ҡыҙҙарҙы ата-әсәһе янына илтеп тә ҡуя. Әбей менән бабай ҡыҙҙарының иҫән-һау ҡайтыуына ҡыуанған. Сит ерҙә ҡалмай, үҙ еренә ҡайтҡандары өсөн ҡыҙҙарының исемдәрен Телһөйәр, Илһөйәр, Ерһөйәр тип үҙгәрткәндәр, ти.



**Ғәлиева Айлин**

*Өфө калаһы кала округының 126-сы мәктәп муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы*

*Етәксеһе: Яҡшығолова Әлфирә Хәмзә ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы*

## Тылсымлы фея

Йәшәгән, ти, бер Миләүшә исемле ҡыҙыҡай. Уның бер ҡасан да дуҫтары булмаған. Миләүшә бик изгелекле, аҡыллы, шат күңелле ҡыҙ булған. Тик, ни сәбәптәндер, ул уны үҙе лә аңламаған, уның бер дуҫы ла булмаған. Үҙенең дуҫлашыу тәҡдимдәренә яуап итеп тик мыҫҡыл итеүҙәр генә алған.

Ҡыҙыҡай йыш ҡына әсәһенән, ни өсөн шулай булыуын һораған. Әсәһе ҡыҙының был һорауына: “Ҡыҙым, улар кемгә арҡа менән боролоуҙарын аңламайҙар”, – тип яуап биргән.




25 февраль көнө еткән – Миләүшәнең тыуған көнө. Уға ун ике йәш тулған. Был көндө уны әсәһе уятҡан, ҡыҙын иркәләп үпкән һәм бүләк биргән. Был бүләк уйынсыҡ –

ҡыҙыҡай күптән хыялланған Фея булған. Ҡыҙыҡай ҡыуанып бүләкте ҡабул иткән, әсәһенә рәхмәттәр әйткән. Был көндө ҡыҙыҡай ғаиләһе менән үткәргән. Кискеләккә әсәһе бешергән торт өҫтөндәге шәмдәрҙе өргәндә, Миләүшә үҙенең иң көслө хыялы – күп дуҫтары булыуын теләгән. Ул һәр ваҡыт яңы бүләкте мендәр аҫтына һалып йоҡлар булған, бөгөн дә шулай эшләгән.

Төндә Фея терелгән һәм үҙенең тылсымлы таяҡсаһы аша Миләүшәнең класташтарына, таныштарына ҡыҙсыҡтың исеменән изге хәбәрҙәр ебәргән. Иртәнсәк Миләүшә, уянғандан һуң, үҙ телефонында дуҫлыҡ тәкдим итеүсе бик күп хәбәрҙәр күргән. Ҡыҙыҡай бик ныҡ аптыраған һәм шул уҡ ваҡытта бик ҡыуанған, сөнки быға тиклем уға берәү ҙә яҙмаған. Миләүшә уға Фея ярҙам итеүен аңлаған.

Шулай итеп, Миләүшәнең бик күп дуҫтары барлыҡҡа килгән, ә Фея уға ярҙам иткән. Ҡыҙыҡай үҙенең тормошон үҙгәрткән өсөн Феяға көн һайын рәхмәт әйткән. Тормошта дуҫлыҡтан да ҡәҙерле нәмә юҡ!



***Камалова Диана***

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 128-се мәктәп муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Әхмәтшина Юлиә Ринат ҡыҙы***

## *Ни өсөн компьютерҙа оҙаҡ уйнарға ярамай?*

Борон-борон заманда бер ауылда йәшәгән, ти, бер ир менән ҡатын. Уларҙың Айһылыу исемле ҡыҙҙары һәм Айбулат исемле улдары булған. Тиҙҙән Беренсе сентябрь, ә уҡыуға кәрәк-яраҡтар алынмаған әле. Бер көн ата-әсәһе:

– Беҙгә баҙарға барып ит, һөт ризыҡтары һатып, кейем, сумка, дәфтәр һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алырға кәрәк. Ә һин ҡустыңды һәйбәт итеп ҡарап тор, компьютерҙа уйнап ултырып, ҡустыңды онотоп китмә, – тип әйткәндәр ҙә, баҙарға сығып киткәндәр, ти.

Атаһы менән әсәһе сығып китеүе булған, ҡыҙыҡай өйгә ингән дә компьютерҙа уйнарға ултырған, ә ҡустыһы ҡапҡа алдында ҡалған. Эй, йөрөй, ти, ҡустыһы урамда бер үҙе аптырап, тегеләй барған, былай барған, апайын уйнарға саҡырып ҡараған, ләкин уны ишетеүсе булмаған.

Бер ваҡыт күршеләрҙең ҡаҙҙары һары ғына себештәре менән үтеп баралар, ти. Улар шул тиклем матур булғандар, Айбулат шуларҙы тотам тип артынан йүгерә башлаған, себештәр әсәләренең артынан ҡалмайбыҙ тип йүгерәләр генә икән. Айбулат бәпкәләр артынан китеп барып, ауылдың бер яҡ осона барып еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалған, ти. Ҡаҙҙар себештәрен эйәртеп йылғаға төшөп китәләр, ә Айбулат һаман да ҡыуып етеп, тотам тип, уларҙың артынан бер тотам ҡалмай йүгерергә тырышҡан. Тамам арыған малай утрауға еткәс, ағас төбөндә йоҡлап та киткән, ти. Уянып киткәндә ҡояш байыған булған.

Айһылыу һаман да компьютерҙа уйнауын дауам иткән. Ҡапыл ауыл эсендә ут һүнә, компьютер ҙа

эшләүҙән туҡтай. Шунда Айһылыу әсәһенең һүҙҙәрен иҫенә төшөрә, тиҙ генә урамға йүгереп сыға, ә унда Айбулат юҡ. Айһылыу тегеләй йүгергән, былай йүгергән, ләкин ҡустыһын таба алмаған, ти.

Шул ваҡыт күршеләре ҡаҙ бәпкәләрен эҙләп килеп сыҡҡан. «Гел кирегә китәләр, ыңғай ғына йөрөмәйҙәр, ауыл осонан кирегә аға торған ғәҙәттәре бар», – тип һөйләнеп китеп барғанын ишеткәс, әллә Айбулат бәпкәләр артынан китте микән тип, йылғаға йүгергән ҡыҙ. Ауыл осона етеп барғанда алмағас үҫеп ултыра икән. Айһылыу:

– Эй, алмағас, алмағас, Айбулатты күрмәнеңме? – тип һораған.

– Минең алмаларымды йый әле, – тип үтенгән.

– Ваҡытым юҡ шул, – тип яуаплаған ҡыҙ.

– Мин һиңә тәмле алмаларымдан ауыҙ иттерермен, – тигән алмағас.

– Магазинда алмалар күп, шунан алырбыҙ әле, – тип китергә ыңғайлаған.

– Магазиндағы алмаларҙы химикат һибеп үҫтерәләр, ә минекеләр саф, таҙа ерҙә үҫә, витаминға бай, зинһар, йый инде. Айбулаттың ҡайҙа икәнен әйтермен, – тигән алмағас.

Нишләһен инде, ҡустыһын эҙләп табып алып ҡайтырға кәрәк бит. Айһылыу алмаларын тәмләп ҡарап йыйған, ҡайтҡанда алырмын тигән.

– Рәхмәт Айһылыу, үҫеүе еңел булып ҡалды. Айбулат бәпкәләр артынан ары йүгерҙе, алғараҡ бар, – тигән алмағас.

Айһылыу артабан йүгергән һәм бер бәләкәй шиш-



мәгә тап булған.

– Шишмә, шишмә, Айбулат ҡустымды күрмәнеңме?

– Күреүен күрҙем, өҫтөмдәге ҡыйҙарҙы йыйһаң, әйтермен, шишмәмдәге һыуҙы эсерһең, – тигән.

– Ваҡытым юҡ, һыу магазинда ла бар, – тип китергә ашыҡҡан ҡыҙ.

– Ә минең һыуым шифалы, таҙа, әгәр эсеп ебәрһәң, Айбулаттың ҡайҙа икәнен әйтермен, – тигән шишмәкәй.

Айһылыу һыуҙың өҫтөн таҙартҡан, эсеп ебәргән. Һыу бик тәмле икән, һыуҙы ошонан алыр кәрәк, әсәйгә лә әйтермен тип уйлаған ул.

– Айбулат яңыраҡ ҡына бәпкәләр артынан йүгерә ине, тауыштары ла ишетелде, анау йылға буйына төштөләр, – тигән шишмәкәй.

Айһылыу бер аҙ ғына йүгергән икән, бәпкәләр күренгән. Ә Айбулат утрау буйлап ҡайтырға юл эҙләп йөрөй икән. Апайын күреп ҡустыһы хатта илап ебәргән. Айһылыу ҡустыһын да, күршеләренең ҡаҙ бәпкәләрен

дә алып ҡайтҡан. Ул үҙен ҡустыһы, ата-әсәһе алдында бик ғәйепле тойған. Компьютерҙа иҫ киткәнсе оҙаҡ ултырырға ярамағанлығын яҡшы аңлаған. Был хәлде ҡайтып, ата-әсәһенә бөтәһен дә һөйләгән, үҙенең хатаһын аңлап, уларҙан ғәфү үтенгән. Ағаста үҫеп ултырған алманың тәмлелеген, ағып ятҡан һыуҙың шифаһын һөйләгән.

Икенсе көндө ата-әсәһе менән бергәләп алма йыйырға барғандар, шишмәнән һыу алып сәй ҙә ҡайнатып эскәндәр. Ваҡиғаның былай тамамланғанына бик ныҡ ҡыуанғандар.

Бына шулай, Айһылыу кеүек, компьютерҙа оҙаҡ уйнарға ярамай. Сөнки ул бер яҡтан һаулыҡҡа зыян килтерһә, икенсе яҡтан ваҡытың бушҡа әрәм була. Шуға күрә һәр нәмәне самаһы менән генә ҡулланырға кәрәк, балалар!



## Ҡаҫҡынова Сабина

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «123-сө лицей» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Ҡаҫҡынова Земфира Әхмәтйән ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

## Ҡыш һәм яҙ

– Тағы буран урамда, Ҡояш апай! Март булды бит инде. Яҙбикәне ҡурҡыта бит был Ҡыш Малай.

– Эйе, ҡурҡып, өйҙә ултыра. Бурандан ҡурҡа икән.

– Эййй, ҡурҡмаһын. Әйт, сыҡһын!

– Ярар! Әйтермен!

Ҡояш йылытҡас, Яҙбикә өйөнән килеп сыҡты. Урам буйлап йүгерҙе. Ул йүгергән ерҙә ҡарҙар ирене. Балалар артынан шатланып йүгерҙе. Быны күреп, Ҡыш малайҙың да тағы уйнағыһы килде. Тик ул сығыу менән ниңәлер урамдағы һыуҙар шыҡырҙап туңды. Балалар ҙа уның һелтәп-һелтәп ебәргән ҡарҙарына ҡыуанмай. Коньки эйләмәйҙәр, санала шыумайҙар. Был ни хәл? Ҡыш малай ултырып, илай башлағайны ямғыр ҡатыш буран башланды. Быны күреп, Ҡояш апай уның башынан һыйпаны.

– Илама, Ҡыш малай, һине бит Ерҙең икенсе яғында көтәләр. Унда ла һине яратырҙар. Уларҙың да коньки, сана шыуғылары килә һинең менән. Анау болотҡа сананды эл дә, елдер генә!



Бына шулай, мартта ла Ҡыш малайҙың уйнағыһы килә, ә Яҙбикә, уны күрһә, өшөй ҙә кире йүгереп инеп китә өйөнә. Ерҙең икенсе яғына күсергә онотоп китә ҡайһы саҡ. Шулай инде, уйнап кем туйған. Бына шуға күрә лә мартта йә буран, йә йылы, йә ямғыр, йә ҡар яуа икән.





## Кыямова Әминә

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «16-сы гимназия» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Аҙнабаева Гөлназ Ғәбделмәжит ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

## Сихри көн

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың балалары булмаған.

– Эх, булһа ине һап-һары сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҙыбыҙ, – тип уфтанған улар.

Бер көндө әбей менән бабай урманға еләккә барғандар.

Йырлай-йырлай еләк йыйғандар былар. Кәрзиндәре тулып, инде ҡайтырға йыйынғас, ҡайҙалыр яҡында ғына, бала илауы ишетелгән. Әбей менән бабай күп уйлап тормайынса, теге тауышты эҙләп киткәндәр. Эҙләй торғас, бер ағас араһында бәләкәй генә ҡурсаҡ ята, ти. Йәне юҡ, ләкин илай икән! Әбей ҡурсаҡты ҡулына алам ғына тигәндә, ағас башынан һикереп тейен килеп сыҡҡан да:

– Мин һеҙҙең хәлегеҙҙе беләм. Әгәр миңә ярҙам итһәгеҙ, хыялығыҙ тормошҡа ашыр! – тигән.

– Ниндәй ярҙам кәрәк, тейенкәй?!

– Минең бер балам һунарсы ауына эләккән, ысҡындырып ебәрһәгеҙ, мин дә һеҙгә ярҙам итер инем! – тигән тейен.

Бабай менән әбей тиҙ генә барып, тейен балаһын ауҙан ысҡындырғандар. Әйләнеп килһәләр, теге ҡурсаҡ



матур ғына ҡыҙыҡайға әйләнеп, тейен эргәһендә борғолана ти.

Тейен:

– Ярҙамығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Бына һеҙҙе ҡыҙығыҙ көтөп тора! – тигән.

Бабай менән әбей бик ҡыуанғандар. Баланы ҡосаҡлап алып, өйҙәренә алып ҡайтып киткәндәр. Ҡыҙҙарына Алтынсәс тип исем биргәндәр. Шул көндән алып, улар бергәләп татыу йәшәгәндәр, ти.



## Луғаманов Даниэль

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 227-се балалар баҡсаһы муниципаль бюджет белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Ғайсина Лидия Валерьевна***

## *Дауалаусы еләк*

Йәйҙең бер көнө ине. Балалар шаулашып урманға әҙерләнделәр. Улар еләк йыйырға булдылар. Артур улар менән барырға йыйынды, сөнки олатаһы дауаханала ята. Уға Артур еләк ашатҡыһы килде. Урманға барып ул бер кәсә еләк йыйҙы. Үҙе ашаманы, олатаһына һаҡланы. Өләсәһе еләкте дауаханаға алып барҙы. Олатаһы ҡыуанып, еләк менән һыйланды. Ауырыуы бөткән кеүек булып тойолдо. Артурҙың йыйған еләге уға йәшәргә көс бирҙе.






## *Нәзмиев Әнүәр*

***Өфө калаһы кала округының 4-се мәктәп муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы укыусыһы***

***Етәксеһе: Әбхәлимова Ғилминур Хәбибулла кызы, башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы***


## *Емеш*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер Әбей менән Бабай. Бик яҡшы итеп йәшәп ятҡан ерҙән, Әбей ауырып китә. Бабай әбейҙе күп дауалаусыларға күрһәткән, ләкин бер файҙа ла күрә лә алмаған.

Берҙән-бер көндө Бабай төшөндә бер туғанын күрә.

Ул әбейҙе тик бүре емешенән генә тереләсәген әйтә. Тик ул емеш ябай түгел. Был емеште табыр өсөн бик күп юлдар үтеп, бүренең йәшәгән еренән алып ҡайтырға кәрәк икәнен әйтә.

Бабай ошоно ишетеү менән уянып та китә. Аҙыҡ алып юлға сыға. Үҙе менән Һарығын да ала.

Күп юлдар үтеп былар бүренең йәшәгән еренә барып еткәндәр, ти. Бабай Һарығын урманда йәшерә лә, Бүре йәшәгән ергә китә. Күпме ялбарып емеште һораһа ла, Бүре бирмәй ти. Шул ваҡыт Бабай Һарыҡты емешкә алмаштырырға була. Бүре шатланып риза була. Бүре емеште алып, Бабай менән урманға китә. Һарыҡ Бүрене күреү менән соҡор аша һикереп ауылға табан саба, ә бүре соҡорға осоп төшә. Бүренең емеше соҡор янында ятып ҡала. Бабай емеште алып, Әбейе янына ҡайтып китә. Һарыҡтың зирәклеге арҡаһында Әбей терелеп, Бабайы менән әле лә донъя көтөп ята, ти.

## *Нафиҡов Алисхан Лом-Али улы*



***Өфө ҡалаһы ҡала округының «Халыҡтар Дуҫлығы орденлы Максим Горький исемендәге 3-сө гимназия» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәкселәре: Острянская Мария Дмитриевна, башланғыс класс уҡытыусыһы; Нафиҡова Фәнгизә Рафаил ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

# *Өс егет һәм аждаһа*



Йәшәгән, ти, бер туған егеттәр: Сәлим, Кәрим һәм Ғәлим. Улар һәр саҡ бергә булғандар, һунарға, балыҡҡа йөрөгәндәр, бар эштәрҙе лә бергә эшләгәндәр. Ә бына ял ваҡыттарында Сәлим менән Кәрим телефондарынан баштарын да ала алмағандар ти, уйындар уйнап тик ултырғандар. Ғәлим улар менән бергә телефонда уйнамаған, ә өйҙә мейес башында китап уҡып ятҡан. Шулай бер ваҡыт Сәлим менән Кәрим тау башында, бар донъяларын онотоп телефондарына текәлеп ултырған ваҡытта, быларға өс башлы аждаһа һөжүм иткән икән. Кәрим аждаһанан ҡасып өлгөргән, ә Сәлим өлгөрмәй ҡалған, ти.

Кәрим ах та ух килеп, өйгә йүгереп ҡайтып кергән дә: «Ғәлим, Ғәлим, беҙ тау башында телефон менән уйнап ултырғанда, беҙгә өс башлы аждаһа һөжүм итте! Мин ҡасып өлгөрҙөм, ә Сәлим урманда тороп ҡалды! Әйҙә, тор, туғаныбыҙҙы аждаһаға ашарға бирмәҫбеҙ бит инде!» – тип ҡысҡырып, һаман да китап уҡып ятҡан Ғәлимде йүгертеп алып сыҡҡан, ти. Урманға килеп етһәләр, өс башлы аждаһа Сәлимде ҡаршыһына ултыртып һорау ала икән. Ә Сәлим бер генә нимә лә белмәй, ти. Хатта яуаптарҙы телефонынан да эҙләп ҡарай, ти, ә урман эсендә интернет тотмай икән. Аждаһа Кәрим менән Ғәлимде

күреп ҡалған да: «Эй, егеттәр, әгәр ҙә һеҙ ҙә был өс һо-рауға яуап бирә алмаһағыҙ, өсөгөҙҙө лә ашайбыҙ. Ә кем яуап бирә, бына ошо яңы айфонды бүләк итәбеҙ», – тип өр-яңы айфонын күрһәтә икән.

Аждаһаның өс башы берәр һорау бирә, ти. Ғәлим өс һорауға ла тиҙ генә яуап биргән. Аждаһа уны нык маҡтаған һәм вәғәҙә иткән бүләген тапшырған да йыраҡҡа-йыраҡҡа осоп та киткән.

Бына шулай итеп, Ғәлимдең күп уҡырға яратыуы өс бер туғанды бәләнән ҡотҡарған, ти, хатта бүләкле лә иткән. Ғәлим яңы телефоны менән уйнап ултырмаған, ә тағы ла күберәк яңылыҡтар уҡып белгән. Был хәлдән һуң Сәлим менән Кәримгә лә аҡыл ултырған: улар ҙа телефондарын кәрәк ваҡытта ғына ҡуллана башлаған-дар, ти.




## *Нурмөхәмәтов Динислам*

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Латыпова Динара Рәжәп ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***


## *Уҫал бесәй менән себеш*

Йәйге матур көндә бер тауыҡтың себеше донъяға килә. Әсәһе улының ниндәй матур, йомшаҡ булыуына



һоҡланып бөтә алмаған. Тауыҡ себешен бөтә нәмәгә өйрәтә: бойҙай сүпләргә лә, үлән йолҡоп ашарға ла. Әммә, бигерәк тә әсәһе себешенә ҡапҡа аша урамға сығырға рөхсәт итмәгән, ти.

– Унда бәләкәй себештәргә һунар иткән уҫал бесәй йәшәй. Ә һин бәләкәй һәм уның менән көрәшә алмаяҫаҡһың. Бесәй һине тотоп ашар, – тигән, тауыҡ-әсәй.

Әммә себеш бик ҡыҙыҡһыныусан була, ул унда, ҡапҡа артында, нимә барлығын күргеһе килә икән.

Бер көн, әсәйен тыңламайынса, себеш урамға сығып йүгерә. Башта ул аптырап ҡала, әммә, бер аҙ йүгереп йөрөгәс, өйрәнеп китә: урамда ни тиклем шәп икән, йәшел үлән дә күп.

Шулай итеп, себеш йөрөй урамда, үлән ашай һәм ҡыуаҡтар артында теге уҫал бесәйҙең йәшеренгәнен дә күрмәй. Бәләкәй себеш яҡын килеп еткәс, уны тотоп алырға көтөп ята икән, хәйләкәр. Ә себеш бер нәмә лә һиҙмәй, бесәй көткән ҡыуаҡҡа яҡыныраҡ килә. Һәм ул килеп еткәс, бесәй ҡыуаҡтан һикереп сығып, себеш алдына баҫа.

– Кем һин? – тип һорай себеш.

– Мин бесәй, – тип аптырап яуаплай бесәй.

– Ә мин себеш, әйҙә дуҫлашайыҡ, – тип йылмайып ҡарай себеш.

Бесәй тағы ла нығыраҡ аптыраған. Уның тормошонда бындай хәл булмаған. “Себеш менән дуҫлашыу етмәгән ине”, – тип уйлаған бесәй, әммә ниңәлер:

– Әйҙә һуң, – тигән.

Себеш менән бесәй күңел аса, йүгереп йөрөп, баҫтырыш уйнай башлай.

Шул ваҡытта урамға себештең әсәһе килеп сыға, ул улын юғалтып, бик ныҡ ҡурҡҡан икән. Ә улын бесәй баҫтырып йөрөгәнен күреп, тағы ла нығыраҡ ҡото осҡан. Себеш әсәһе янына йүгереп килеп:

– Минең өсөн ҡайғырма, әсәй. Хәҙер был бесәй – минең дуҫым! Беҙ дуҫлаштыҡ һәм беҙгә бик күңелле. Ул усал бесәй түгел, уның бер ҡасан да дуҫтары булмаған, мин уны дуҫ булырға өйрәттем, – тип ҡыуанып һөйләгән.

Ә бесәй тауыҡҡа яҡынлашҡан һәм хатта иркәләнеп мырлап та ебәргән, ти.



***Сөләймәнова Диана***

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «68-се лицей» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Сөләймәнов Ринат Миңлеғәле улы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

## «Күңел» урманы

Һеҙ Нәзирҙе беләһегеҙме? Быға тиклем ул тәртипһеҙ малай ине бит. Бөтә өлкәндәр ҙә уны әрләй торғайны. Тиҫтерҙәре һәм үҙенән кесерәктәр уны ҡырҙан урап үтер булды. Һаман да шулай дауам итер ине, әгәр ҙә Нәзиргә ҡурҡыныс бер төш инмәһә.

Был хәл йома көндө булды. Сираттағы йоҙроҡлашыуҙан һуң ғына ҡайтып инде Нәзир һәм шым ғына бүлмәһенә инеп ятты. Күҙен йомоу менән йоҡлап та китте. Ә күҙҙәрен асҡанда... Унын алдында шомло урман пәйҙә булды.

Ул шул тиклем ҡурҡыныс һәм ҡараңғы ине. Ундағы үҫемлектәр ҡороп барған хәлдә. Тирә-йүн бысраҡ һәм лапы-лопо менән тулы. Беҙҙең герой янынан ҡуянҡай һикерәңләп үтте. Нәзир уға өндәшеп ҡысҡырғайны, ҡылый күҙ ҡурҡышынан ары сапты һәм күҙҙән юғалды. Малай алға табан атланы. Осраған һәр кейек, уны күреү менән, шөрләп, ҡуйы урманға инеп боҫто. Йәнлектәрҙең ҡунаҡты күреүҙәренә шат булмауҙары һиҙелеп тора ине.

Көтмәгәндә һуҡмаҡ бөттө лә, Нәзирҙең күҙ алдында иҫке йорт пәйҙә булды. Ихаталағы иҫкелеккә ҡарап тороуы ерәнес, ҡоймалары йығылып бара. Малай ишеккә шаҡыны. Әммә асыусы булманы. Ишек бикһеҙ булып сыҡты. Ул һаҡ ҡына эскә инде. Йорт эсе ауылса йыйыштырылған ине. Малай урындыҡҡа ултырып, саңлы тәҙрәләр аша тышты ҡараны һәм был урманға нисек килеп сығыуы тураһында уйланды. Көтмәгәндә аҡ яулыҡ ябынған, күк күлдәк кейгән ҡарсыҡ килеп инде. Ошо тиклем ҡурҡыныс урманда йәшәүенә ҡарамаҫтан, уның йөҙөнән шәфҡәтлелек һәм яҡтылыҡ бөркөлә ине. Нәзир

ҡапыл һикереп торҙо һәм:

– Ғәфү итегеҙ, мин ҡайҙа барырға белмәнем дә..., – тип аҡланырға кереште ҡарсыҡты күреү менән. Ул үҙен бик уңайһыҙ тойҙо.

– Ултыр-ултыр. Беләм, һин насар малай түгелһең. Һинең тормошоңда ҡатмарлыҡтар булған. Аңлайым.

Нәзир аптырап, ҡатып ҡалды. Уның тормошо тураһында ул ҡайҙан белә? Әллә әбекәй кешенең уйҙарын уҡыу һәләтенә эйәме? Ҡарсыҡ дауам итте:

– Һәр кемдең дә ауыр ваҡыттары була. Тик ул ауырлыҡтарҙың һинән насар кеше яһауынан һаҡлана белергә кәрәк. Мин һинең ҡайғыларыңды иҫләтеп тормайым. Ҡайтыу яғына табан атлағанда һин барыһын да үҙең аңларһың. Онотма: насар кешеләргә ҡарағанда, яҡшылары һәр ваҡыт күберәк. Әгәр киреһенсә булһа, донъяның күптән аҫты-өҫкә әйләнер ине. Һин ошо урманды ҡотҡар, сөнки был урман – һинең йәнең. Юғиһә, ул һәләк буласаҡ. – Ҡарсыҡ Нәзирҙең күҙенә баҡты.

– Йә, инде юлыңда бул. Ҡара уны, минең әйткәндәрҙе онотма. – Уның тауышында малайға ҡарата ышаныс, шәфҡәтлелек һәм шул уҡ ваҡытта уҫаллыҡ һиҙелә ине.

Нәзир тороп баҫты ла, һаҡ ҡына аҙымдар менән йорттан сығып китте. Юл ыңғайына үҙенең ни өсөн ҡаты күңеллегә әйләнеүе хаҡында уйланып барҙы. Һәм сәбәбен аңланы шикелле. Бер нисә йыл элек уны йыш ҡына мәктәптә һәм урам буйында малайҙар ҡыйырһытты. Атаһы гел генә бер сәбәпһеҙгә әрләне, ә аҙаҡ ғаиләһенән бөтөнләйгә сығып китте. Шулай итеп малай үҙ эсенә йомолдо һәм бар нәмәгә күңеле ҡатты...

Бына ул ҡапыл уянды. Бүлмәлә яҡтылыҡ бар ине.

Нәзир күңелендә нимәлер үҙгәргәнен тойҙо. Ул көҙгөгә ҡараны ла, үҙ-үҙенә былай тине:

– Бөгөндән алып мин яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлаясаҡмын!

Нәзир үҙ-үҙенә ышана ине. Ҡоро һүҙҙәр генә булманы былар. Был – үҙ-үҙеңә ант биреү ине. Малайға яҡшы яҡҡа үҙгәрер өсөн күп тырышлыҡ һалырға тура килде, әлбиттә. Бер айҙан уның тормошо һәйбәтләнә башланы.

Бер ваҡыт уға тағы ла теге урман һүрәтләнгән төш инде. Тик был юлы ул хозур һәм яҡты ине. Кейектәр үҙен осратып, ҡурҡманы ла, ҡасып та китмәне. Нәзир теге йортҡа тиклем үк килеп етте. Йорт та бик күркәм күренә ине. Торбаһынан быу сыға һәм тәҙрәләрҙән тәмле бәлеш еҫтәре килә. Матур ихатала әбекәй йылмайып тора. Был ҡарсыҡ – Нәзирҙе ҡоро әрләү менән генә сикләнмәгән, ә уға ҡарата ышаныс һаҡлаған һәм тылсым һүҙе менән ярҙам иткән берҙән-бер бөртөк кеше булды. Әйтерһең дә, ул малайҙың күңеленә инде һәм уны дауалай алды. Нәзир уға мең рәхмәтле хәҙер. Быны күреүҙән әбекәйҙең шатлығы йөҙөнә сыҡҡан ине.




## *Әсәҙуллина Ләйсән*

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 263-сө балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Ғәлиуллина Ғәлиә Ғәли ҡыҙы***

## Юлиә кәзәләре

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Юлиә исемле уңған, егәрле, зирәк бер ҡыҙ. Уның әсәһе ап-аҡ кәзәләр аҫыраған. Дебет мамығынан ҡыҙ матур-матур шәлдәр бәйләгән, ти. Хатта сит илдән дә килеп һатып алғандар.



Ә күршеһендә ялҡау, көнсөл Ләйсән исемле ҡыҙ йәшәгән. Ул Юлиәгә үсләшеп, кәзәләрен дегәнәкле тауға ҡыуған.

Дегәнәктәр батшаһына Ләйсән: «Үҙем һеҙгә матур шәл бәйләп бирәм, әгәр бөтөн дегәнәктәрҙе Юлиәнең кәзәләренә ҡаршы һөжүмгә ебәрһәң», – тигән.

Дегәнәктәр сәрелдәшеп, уҡтай геүелдәп кәкре мөгөҙҙәрҙең йөнөн һырып алған.

Юлиә, кәзәләрен күреп, тәүҙә ҡурҡып киткән. Әммә, күрше ҡыҙҙың аҫтан көлгәнен һиҙеп, тиҙ аңлап алған.



Кәзә дебетен дегәнәктән таҙартып теткән, ҡаба аша үткәргән. Унан ҡолғаға бәйләп йырлай-йырлай орсоҡ менән иләй башлаған.



Зирәк ҡыҙҙың тырышлығына хайран ҡалған Ҡояш апай. Уға үҙенең ете төҫтәге нурлы ептәрен бүләк иткән. Дебет ептәренә ҡушып бәйләгәндә нурлы йомғаҡтар һис тә кәмемәгән. Йәйғор төҫтәрендә иҫ китмәле, күҙҙең

яуын алып торған шәлдәр бәйләгән ҡыҙ.



Ә теге дегәнәкле йөндәрҙән Юлиә дуҫ ҡыҙҙарына ҡурсаҡтар, гөлләмәләр эшләп байрамға бүләк иткән. Юлиәгә этлек уйлаған Дегәнәк батшаһы быны күреп оялып киткән. Һәм үҙенең йәбешкән дуҫтарына ҡыҙға башҡа үсләшмәҫкә ҡушҡан, ти.

Ә күрше ҡыҙ Ләйсәндең асыуынан, боҙоҡлоғонан йөҙө ҡара таптар менән ҡапланған. Хатта өйөндәге бесәйе менән эте лә уны күреп ситкә тайпылғандар, ти.

Ләйсән үҙенең хатаһын һуңлап аңлаған һәм Юлиәгә йүгергән. Әлбиттә, ҡыҙ уны ғәфү иткән, хатта шәл бәйләргә өйрәтә башлаған, ти.





## Әхмәзиева Эльза

***Өфө калаһы кала округының 214-се балалар баксаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәкселәре: Сөләймәнова Айгөл Иршат кызы, Ильина Анна Викторовна***

## Бал корттары

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Улар бик тырыш булғандар. Ике умарта тотҡандар. Бер умарта эсендә егәрле, икенсе умартала ялҡау бал ҡорттары йәшәгән. Егәрле бал ҡорттары, таң менән туғайға сығып, көн оҙоно бал йыйып, умарталарына ташығандар. Ә икенсе умарталағы бал ҡорттары, йәй буйы сәскәнән-сәскәгә ҡунып, күңел асып ҡына осоп йөрөгәндәр.



Бына йәмле йәй үтеп, ямғырлы көҙ килгән. Көҙ артынан буранлы ҡыш башланған. Ялҡау бал ҡорттары өшөгәндәр, асыҡҡандар. Сөнки улар үҙҙәренә ашарлыҡ бал йыймаған бит йәй көнө. Был хәлде күреп әбей менән бабай бал ҡорттарын йыйып, умарта эсенә шәкәр һипкәндәр. Бал ҡорттары шул шәкәрҙе ашап иҫән-имен ҡышлағандар. Йәмле йәй еткәс, бал ҡорттары бер ваҡытта ла ялҡау булмаҫҡа һүҙ биргәндәр. Шунан бирле улар сәскәнән-сәскәгә ҡунып, тырышып биҙрә-биҙрә бал ташыйҙар умарталарға. Бер ялҡау бал ҡортон да күрмәҫһең.



**Бикмәтова Русалина**

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 300-сө балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Соснина Лилиә Хөрмәт ҡыҙы***

## Еләк бәлеше

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, Урмансы бабай. Ул көн һайын урман буйлап йөрөп, тәртипте күҙәткән.

Бер ваҡыт бабай түңгәктә бойоғоп ултырған Йомшаҡай исемле ҡуян балаһын осрата.

– Ни өсөн кәйефең юҡ? – тип һорай Урмансы бабай.

– Минең ағайҙарым еләккә киттеләр, ә мине, бәләкәсһең тип, алманылар. Ә мин ҙур! Ҡарағыҙ,

ҡолаҡтарым да оҙон, аяҡтарым да тиҙ, күҙҙәрем дә үткер күрә!

Урмансы бабайға Йомшаҡай йәл булып китә. «Нисек кенә уға ярҙам итергә?» – тип уйлай һәм урман ситендәге аҡланда үҫкән еләктәрҙе иҫенә төшөрә. Йомшаҡайға кәрзин тоттороп, уны шунда оҙата. Аҡланда еләктәр шул тиклем күп була, Йомшаҡай тиҙ арала кәрзинен тултырып, урмансы бабайға рәхмәт әйтеп, һөйөнөп ҡайтып китә.

Йомашаҡайҙың әсәһе, еләк тулы кәрзинде күргәс, бик шатлана, һәм йыйылған еләктәрҙән ҙур бәлеш бешерә.

Ағайҙары өйгә ҡайтҡас, бик аптырағандар. Әсәләре: «Был еләктәрҙе Йомшаҡай йыйҙы», – тип әйтә.

– Вәт, афарин, туғаным! Бәләкәс булһаң да уңған икәнһең! – тиҙәр өлкән ағайҙары.

Һуңынан бөтәһе бергәләп еләк бәлеше менән сәй эсәләр.

Шул ваҡыттан алып ағайҙары Йомшаҡайҙы һәр ваҡыт үҙҙәре менән урманға йөрөтә башлаған, ти.





## *Ишдәүләтов Ильяс*

***Өфө калаһы кала округының «18-се башкорт балалар баксаһы» муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Ишдәүләтова Әлиә Риза кыҙы***

## *Эт менән бесәй*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, бер кеше. Уның өйө матур, урамы ҙур икән. Сит йәнлектән, ят кешенән өйөн батыр эт менән шәп бесәй һаклаған. Улар икеһе татыу, дуҫ булған. Көнө-төнө урамды һаклағандар.

Кеше тоғро дуҫтарына урамда оя ла эшләп ҡуйған. Эт менән бесәй шул ояла бергә йәшәгәндәр.

Бер көн бесәй ялҡауы килгән дә, эткә былай тигән:

– Дуҫҡай, мин ауырыйым инде әллә. Үҙең генә бөгөн эш эшлә.

– Ярай, булдырам, – тигән дә эт, көнө буйы йүгергән, эшләгән.

Ә бесәй рәхәтләнеп йоҡлаған, тик ятҡан.

Бер көн шулай ҡабатлаған, икенсе көн. Өсөнсө көн хужа эттең бер үҙе генә йөрөгәнен күреп, бесәй янына килгән.

Ә хәйләкәр бесәй хужаһына күҙен саҡ асып ҡараған, йәлләтеп кенә «мыяу, мыяу», ти икән. Кеше бесәй өсөн ҡурҡҡан. Уны өйгә индергән, тәмле ашатҡан, мейес

башына һалған. Эй рәхәтләнгән бесәй, оҡшатҡан өй эсен. Кире тышҡа сыҡҡыһы килмәгән. «Хужам ҡыуанһын әле», тип, төндә йоҡо бирмәгән, сысҡандарҙы тотҡан. Хужа был эшкә ныҡ шатланған. Бесәйҙе өйҙә йәшәтергә булған, сөнки эт бер үҙе лә урамды яҡшы һаҡлаған.

Шул ваҡыттан алып, бесәй өйҙә йәшәй башлаған: сысҡан тота, хужаһына иркәләй, рәхәт йәшәй, ти. Ә уның элекке дуҫы эт, бесәйҙе күргән һайын:

– Һау-һау, һауыҡтыңмы? – тип һорай икән.

Әле булһа ла, бесәй тышҡа сыҡһа, эт уға шулай өрә, ти. Ә ояла эт бер үҙе ҡалғас, уны хәҙер эт ояһы тип йөрөтәләр.






## *Мортазин Фидаил*

***Өфө калаһы кала округының «102-се башҡорт балалар баҡсаһы» муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Мортазина Юлиә Зиннәт ҡыҙы***


## *Ни өсөн малайҙар ҡыҫҡа сәсле?*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Уларҙың Сыңғыҙ исемле улдары булған. Уның сәсе оҙон, ялбыр, ти. Етмәһә, йөҙгә лә бик ҡурҡыныс икән был малай.

Сыңғыҙ урамға уйнарға сыҡһа, ҡыҙҙар унан ҡурҡып:

– Шайтан киләәәәә, – тип ҡасҡандар, ти.

Хатта ҡояш та, болоттар араһына инеп йәшенә икән.

Сыңғыҙ бер нимә лә аңлай алмайынса, бойоғоп:

– Ни өсөн ҡыҙҙар мине “Шайтан” тип йөрөтәләр, ни өсөн минән ҡурҡып ҡасалар, хатта бит ҡояш та ҡасып юғала, – тип, үҙенә-үҙе һорауҙар бирә башлаған. Һәм төҫ-кейәфәтенән башлар булған... Йылға буйына төшөп, һыу аша ҡараһа – ысынлап та, бик ҡурҡыныс малай ҡарап тора икән.

Сыңғыҙ йүгереп ҡайтҡан да:

– Атай, миңә оҙон сәс кәрәкмәй! – тигән.

Атаһы сәсен ҡырып ташлауы булған, ҡояш йылмайып килеп сыҡҡан, ти.



Шул көндән алып ауылда малайҙар тыуһа, Сыңғыҙ кеүек яман булып ҡуймаһын тип, малайҙарҙың сәсен ҡыҫҡа йөрөтөр булғандар...




## *Хафизов Радмир*

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 306-сы балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Саҙертдинова Айгөл Флюр ҡыҙы***


## *Сәнскеле һаҡсы*

Ҙур ағас төбөндә һоро сәнскеле терпе йәшәгән. Уның әнәләре бик үткер булған өсөн терпегә «Үткер» тип,

исем ҡушҡандар. Ысын сәнскеләр генә! Шуның өсөн бер кем дә терпе менән уйнарға теләмәй: барыһы ла энә менән сәнселеүҙән ҡурҡа.

Бер ваҡыт Тылсымлы урманда яуыз ас бүре килеп сыға. Ул ҡуянды күреп ҡала һәм уға шым ғына ҡарай башлай. Быны ҡамыш араһында ултырған терпе күреп ҡала. Ул шунда уҡ түңәрәккә төрөнөп, бүре аяғы аҫтына тәгәрәп төшә. Бүре ауыртыуҙан ҡысҡырып, ситкә һикерә. Әммә, терпе бүре артынан тәгәрәп китә. Ул ҡабат-ҡабат үҙенең үткер энәләре менән бүрене сәнсә. Ауыртыуға түҙә алмайынса, бүре Тылсымлы урмандан ҡаса.

– Һинең шундай үткер энәләрең булыуы бик яҡшы. Әгәр ҙә сәнскеләрең булмаһа, мине бүре ашар ине, – тигән ҡуян.

Бөтә урман йәнлектәре Үткер терпенең ҡуянды ҡотҡарыуына шатлана. Ә бүре, терпенең үткер энәләрен иҫенә төшөрөп, башҡа бер ҡасан да Тылсымлы урманда күренмәгән.





## *Батыркаева София*

*Өфө калаһы кала округының 107-се балалар баҡсаһы муниципаль автономиялы мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе*

*Етәксеһе: Хәбибуллина Лилиана Фларис ҡыҙы*

## *Ябалаҡ балаһы*

Борон-борон заманда йәшәгән ти ябалаҡ ғаиләһе. Бер көндө эңер төшкәс, урман янындағы баҫыуға балалары менән һунарға сығып китәләр.

– Йыраҡ осоп китмәгеҙ, юғалыуығыҙ ихтимал, – тип әсәһе балаларын киҫәтә. Ябалаҡ балаһы, ярғанаҡты күреп, урман яғына осоп, ағас ботағына бәрелеп, бер ҡанатын яралай ҙа ергә ҡолап төшә. Ул илай башлай һәм ярҙамға саҡыра башлай, әммә береһе лә уны ишетмәй. Илауынан арып йоҡлап китә. Ата-әсәләре балаһын эҙләп таба алмай өйҙәренә осоп китәләр.

Икенсе көн бер оҫта һунарсы урманда йөрөгәндә был ябалаҡ балаһын күреп:

– Нимә булды һиңә? – тип һорай.

Ул илап-илап һөйләп бирә. Һунарсы ҡошсоҡто йәлләп өйөнә алып ҡайта. Ейәнсәрҙәре күреп шатлыҡтары күккә аша. Бергәләп ябалаҡ балаһын төрлө тәмлекәстәр менән һыйлайҙар һәм яраланған ҡанатын үҙҙәре яһаған май менән дауалайҙар.

Бер аҙна үтә. Ябалаҡ балаһы терелеп оса башлай, ата-



әсәләрен һағына.

– Һеҙгә ҙур рәхмәтлемен! Миңә ҡайтыр кәрәк, ғаиләм мине көтә, – тип ябалаҡ балаһы оҙатырға һорай.

Һунарсы ейәнсәре менән хушлашалар һәм баҫыу яғына юл тоталар. Ябалаҡ балаһы иһә артабан өй яҡтарына осоп китә. Әсәһе һәм туғандарына ҡайтҡас, барыһын да аңлатып бирә. Ябалаҡтың ғаиләһе уның иҫән-һау ҡайтыуына бик шатлана. Ҡошсоҡтоң әсәһе балаһының ҡайтыуына бик ҡыуана. Ул ағас япрағына рәхмәт хаты яҙа һәм балаһына тоттороп ебәрә.

Кис төшкәс, ейәнсәре тышҡа сыға һәм ябалаҡ балаһын күреп, бик шатлана. Өйгә инеп, олатаһын саҡырып сығыуға, ҡошсоҡ осоп киткән була, әммә ерҙә уның хатын табып уҡыйҙар. Ябалаҡ хатында: «Балалар, әсәйҙәрегеҙҙе һәр ваҡыт тыңлағыҙ!» – тип яҙылған була.



## *Йосопов Хәсән*

***Өфө калаһы кала округының «Аҡбуҙат» 75-се балалар баксаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Шәрипова Зөлфиә Тәлғәт ҡыҙы***

# *Кем эшләмәй – шул ашамай*

Борон-борон заманда бер урманда йәшәгән, ти, айыу, бүре, төлкө һәм ҡуян. Айыу көн һайын урман буйлап йөрөп еләк-емеш йыйған, ти. Бүре сабып йөрөп ҡош-ҡорт, ваҡ йәнлектәргә һунарға сыҡкан, ти. Ҡуян ауылға барып баҡсанан кишер, башҡа емештәр алып килгән. Ә төлкө бик хәйләкәр, ялҡау булған. Мин ауырыйым, хәлем юҡ, аяҡтарым ауырта тип, әҙер тамаҡты ашап ҡына тик ята икән.

Бер ваҡыт урманда йәшәгән хайуандар араһында ярыш үткәрергә булғандар. Бөтәһе лә ярышҡа әҙерләнә башлағандар. Ә төлкө һаман ауырыйым тип тик ята икән. Урман хужаһы арыҫлан әйткән ти: «Кем дә кем ярышта еңә шуны яҡшы итеп һыйлап, матур итеп өй эшләп бирә-беҙ», – тигән. Быны ишеткәс, төлкө лә ярышып ҡарарға булған. Бөтәһе лә теҙелешеп торғандар ҙа, йүгерешеп киткәндәр. Төлкөнөң бер нимә лә эшләмәй, ашап ҡына яткас, хәле юк ти. Уның хәле бөтөп, арып, иң арттан килеп еткән. Иң беренсе булып ҡуян сабып килгән. Уны яҡшы итеп ашаткандар, өй биргәндәр. Төлкө ҡуянға: «Әйҙә бергәләп йәшәйек, мин һиңә ярҙам итермен», –

тигән. Ҡуян: «Ярай, әйҙә бергә йәшәйек», – тигән. Көндөҙ ҡуян урман буйлап сабып йөрөп, ашарға әҙерләй, ә төлкө өй тирәһендә эшләйем тип тороп ҡалған. Ҡуян ашарға алып ҡайта ла ашарға ултыра. Төлкө асығып киттем, тип килеп ултыра. Ҡуян: «Һин бит бер нәмә лә эшләмәнең, шуға ашамайһың», – тигән. Төлкө айыу менән бүрегә барам тип киткән. Ләкин улар ҙа төлкөгә ашарға бирмәгәндәр. Шунда ғына төлкө, эшләмәһәң, ашап булмағанды аңлаған. Шул ваҡыттан алып төлкө башҡа хайуандарға ҡушылып эшләй башлаған һәм улар татыу йәшәй башлаған.






## *Мөхәмәҙиев Ризуан*

***Өфө калаһы кала округының 330-сы балалар баксаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Якупова Лилиә Илдар кыҙы***


## *Терпе менән ҡуян*

Бер көндө, ҡуян һикереп уйнап йөрөгәндә, терпене осрата.

Һаулыҡ һорашып, бергәләшеп уйнай башлайҙар. Терпе мороно менән япраҡтарҙы ҡыштырлатып уйнаһа, ҡуян үҙе яратҡан ағас ҡайырыһын эҙләй башлай.



Уйнай торғас, ҡуян бәшмәктәр үҫкән аҡланға килеп сыға, һәм:

– Терпе дуҫ, кил әле, бында ниндәй генә бәшмәктәр юҡ, – тип дуҫына ҡысҡырған.

Терпе:

– Бына исмаһам байлыҡ, әйҙә йыйып алайыҡ, – тигән.



Ҡуян:

– Әйҙә, иң беренсе ашап ҡарайыҡ беҙ уларҙы, – тигән дә, өҫтөнә ҡып-ҡыҙыл түңәрәктәр төшөрөлгән, иң матур, иң ҙур бәшмәкте ҡабайым ғына тигән икән, терпе ҡысҡырып ебәргән:

– Был ағыулы бәшмәк, ашарға ярамай бит, – тип ҡуянды туҡтата.

Ҡуян:

– Ниңә ярамаһын, ҡайҙан беләһең? – тип һораша. Терпе ҡуянға бәшмәктәр тураһында, белгәндәрен һөйләп бирә. Ҡуян ашап өлгөрмәүенә ҡыуанып, рәхмәттәр әйтә.



Шулай итеп, терпе ҡуянды ағыуланыуҙан ҡотҡарып алып ҡалған, ти. Шул көндән улар айырылғыһыҙ дуҫтар булып китәләр һәм һәр саҡ бергә уйнайҙар.




## *Исламғазина Зөлфиә*

***Өфө ҡалаһы ҡала округының «Сит телдәрҙе тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 117-се мәктәп» муниципаль автономиялы дөйөм белем биреү учреждениеһы уҡыусыһы***

***Етәксеһе: Заһирова Айгөл Марат ҡыҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы***

## *Хәйләкәр ярлы*

Борон-борон заманда ҡала ситендәге ауылда Әбйәлил исемле бер ярлы йәшәгән, ти. Уның ере лә, өйө лә, хатта тоғро дуҫы – эте лә булмаған. Бының өсөн ул бик ҡайғырған. Ашарына булмағанлыҡтан, көндәр буйы өйҙән-өйгә йөрөп икмәклек эштәр эшләр булған.

Ә байҙар, иһә, көн дә яңы кейем, яңы келәм алғандар, етмәһә, шуға арнап байрам үткәргәндәр. Әбйәлил был хәлде күргән һайын көйөгө килгән. Уға байрам түгел, йоҡларға нығыраҡ ҡыуыш булһа ла шатланыр ине.

Шулай көн артынан көн үтә барған. Бер көндө Әбйәлил был хәлдән бөтөнләй туйған. Яңы биттән яңы тормош башларға булған. Тик нисек был хәлде тормошҡа ашырырға? Ярлы халыҡ араһында быңдай хәл булғаны юҡ ине.

Өс көн, өс төн уйлағандан һуң, уйлап тапҡан, ти, бер хәйлә Әбйәлил. Урманға барып иң бейек ағасты тапҡан да, йыртылып, ямалып бөткән ҙур тоҡсайын элеп ҡуйған. Эште бөтөргәс, тыныс күңел менән ауылға юлланған.

Икенсе көндө иртән торған да, баҙар яғына юл тотҡан. Халыҡ йыйылғаныраҡ урынға барып ултырған да, башлығын болғай - болғай ҡысҡыра башлаған:

– Эй, кешеләр, яҡыныраҡ килегеҙ, батша һарайынан яңылыҡ килтерҙем!

Ысынында, Әбйәлил батша һарайы эргәһенән дә үтмәгән булған. Был ни бары байыр өсөн уйлап тапҡан хәйләнең бер аҙымы.

Яҡын-тирәнән йыйылған халыҡ түҙмәйенсә һорауҙар бирә башлай:

– Һөйлә инде, нимә булды?

– Ниндәй яңылыҡ?

– Яҡшы хәбәрҙәр алып килдеңме?

Әбйәлил берсә йылмайып, берсә ҡурҡып һөйләй башлай.

– Әле батша һарайында беҙҙең яҡҡа юлбаҫарҙар килә тип ишеттем. Улар беҙҙең ауылда йәшәгән һәр хәлле ғаилә яһаҡ түләргә тейеш, тиҙәр, юғиһә, улар бөтөн ауылды талаясаҡтар һәм ут төртәсәктәр.

Был һүҙҙәр халыҡты ҡурҡытҡан, утта янып юҡҡа сыҡҡансы, яһаҡ түләү отошлораҡ тигән фекергә килгәндәр.

Шулай итеп, урмандағы иң бейек ағас ботағына бәйләнгән теге тоҡсайға ипләп кенә әйберҙәр йыйыла башлаған. Бер нисә көн эсендә тоҡсай тулған. Төн еткәс, тәүҙә Әбйәлил туйғансы ашаған, һуңынан үҙенә ярарлыҡ кейем-һалым һайлап алынған. Ә ҡалған байлыҡты тоҡ-



сайы менән арҡаһына һалған да күрше ауылға юлланған. Таң атыуға тағы ла бер төркөм ауыл халҡы яһаҡ килтерә, тик теге ағастағы ҙур төйөнсөк урынына ни бары бәләкәй бер ҡағыҙ киҫәге эленеп тора икән.

«Һеҙ үҙ бурысығыҙҙы намыҫлы башҡарҙығыҙ, артабан тыныс йәшәгеҙ. Ярҙамығыҙ өсөн рәхмәт!» – яҙылған булған унда. Тәүҙә халыҡ бик аптыраған быһдай тәрбиәле юлбаҫарҙар булыуына, тик шатлыҡ көслөрәк була, һәм был хәл оҙаҡламай онотола.

Ә Әбйәлил иһә, бар байлығын күрше ауылда йәшәгән ярлыларға таратып биргән дә, әлеге уйлап тапҡан ысул менән байҙарҙан яһаҡ йыйырға күрше ауылдар буйлап юл алған. Шул көндән алып, Әбәйлилдең тамағы туҡ, дуҫтары күп икән.



## Сабанаева Сабина

***Өфө ҡалаһы ҡала округының 227-се балалар баҡсаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Шишкина Ксения Анатольевна***

## Хыял

Бәләкәй генә бер ҡаласыҡта әбей менән бабай йәшәгән, ти. Бабай, ауылда ҙур, матур йортта йәшәргә хыялланған булған, ә әбей – эт аҫырарға. Бәләкәй фатирҙа

йәшәгәс, бабай әбейҙең хыялына ҡаршы килгән. “Бына, ауылда ҙур, матур йорт төҙөгәс, этен дә, бесәйен дә аҫырарһың”, – тип йылмайған. Бер көндө, бабай өйҙә ҡалаған, әбей кибеткә юлланған. Үҙе менән эйәһеҙ эт-бесәйҙәрҙе ашатырға аҙыҡ алған. Туҡталышта бер этте күреп ҡалған. Йөнтәҫ, аҡ, ҡаралған эттең муйыныда «Амур» тип яҙылған муйынсаһы ла булған. Әбей уны ашатып, иркәләтеп ҡайтып киткән. Ҡайтып етеп барғанда, әйләнеп ҡараһа, Амур уның артынан эйәреп килә икән. Әбей уның аҙашҡанын аңлап, фатирға алып ингән. Бабай аптырап ҡалған һәм улар Амур тураһында иғлан бирергә булғандар. Ике аҙна ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, Амурҙың эйәһе табылмаған. Инде, Амур менән йөрөштөрөп килергә генә йыйынғанда, ишек ҡағалар. Иғлан буйынса килгән ирҙе күреү менән, Амур уға ҡаршы йүгергән. Әбей менән бабай эттең эйәһе икәнен аңлап, уны фатирға саҡырғандар. «Үҙем эшкә киткәс, күршеләргә ҡалдырған инем, ҡасҡан», – тип аңлатҡан эттең хужаһы. «Әллә һеҙгә генә ҡалдырайыммы?» – тигәс, бабай: «Бик ҡалдырыр инек тә, фатирыбыҙ бәләкәй шул, этте лә һыйҙырып булмаҫ», – тигән. Ҡунаҡ үҙенең йортон һатып алырға тәкдим иткәс, әбей менән бабай оҙаҡ уйламай, риза булғандар. Хәҙер, Амур, әбей һәм бабай ауылда ҙур, матур йортта йәшәй башлағандар. Әбейҙең дә, бабайҙың да хыялдары тормошҡа ашҡан.






## *Мөхсинова Ләйсән*

***Өфө калаһы кала округының 227-се балалар баҡсаһы муниципаль бюджет мәктәпкәсә белем биреү учреждениеһы тәрбиәләнеүсеһе***

***Етәксеһе: Хисмәтуллина Оксана Рәфҡәт ҡыҙы***


## *Бәпембә*

Бер ваҡыт бәләкәй генә үҫенте үҫеп сыға. Тирә яғына ҡаранып уйға ҡала:

– Ҡыҙыҡ, мин үҫеп етһәм, ниндәйерәк булырмын икән? Бик матур булғым килә, тип йылмайып ҡуя. Йылы ямғыр яуып үтә һәм үҫенте бейегерәк үҫә. Бейегерәк үҫкәс, ҡояш апайҙы күреп ҡала.



– Ах! Миңә лә ҡояшҡай һымаҡ булырға ине, – тип уйлап ҡуя. Ҡояш апай өҫтән йылмайып ҡарау менән үҫенте һары сәскәгә әүерелә башлай… Һары сәскә – бәпембә тип атала. Үлән араһында үҫеп ултырған бәпембә, бөтә бөжәктәргә

йылмая һәм йылыһын тарата, әйтерһең дә, бәләкәй ҡояш. Ә бер көн бәпембә өҫкә ҡараһа, һауала ап-аҡ, йомшаҡ ҡына болоттарҙы күрә. “Ах! Минең дә ошо болоттар кеүек булғым килә”, – тип уйлай. Болоттар ергә ҡарау менән, бәпембә ап-аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына аяҡлы болотка әйләнә. Ел өрөп ебәреү менән аяҡлы болоттар, ерҙе ҡаплап, оса башлайҙар. Тирә-яҡ ялан ап-аҡ төҫкә ҡаплана. Күп ваҡыт та үтмәй, аяҡлы болоттар ҡаплаған яланда бәпембә үҫентеләре үҫеп сыға. Тиҙҙән улар һары төҫкә әйләнәсәктәр. Аҙак, аҡ болотло аяҡсалар барлыҡҡа киләсәк. Әгәр уларға өрһәң, улар алыҫ ерҙәргә осоп китәсәктәр...